## 2. Аңлатма яҙыу

Уҡыу предметының дөйөм характеристикаһы

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 2-се класы өсөн башҡорт теленән эш программаһы төҙөгәндә башланғыс дөйөм белем биреүҙең яңы федераль дәүләт стандарттары, федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:

Мәғариф министрлығының 1089-сы номерлы 5.03.2004 йылғы ”Дәүләт белем биреү стандарттарының федераль компоненттарын раҫлау тураһында ”Законы;

«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;

Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы;

«Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы;

Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы;

15-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»;

15-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенең эш программаларының төҙөлөшөн һәм уға талаптарҙы билдәләүсе локаль акты.

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре Толомбаев Х. А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З. М., Усманова М. Г.- Ижевск: «Книгоград», 2008.

**Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән.**

1. Балаларҙы һөйләшергә өйрәтеү мөһим бурыс.
2. Тел менән әҙәби материал бергә ҡушып өйрәнелә( интеграция).
3. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә ( коммуникатив йүнәлеш).

**Маҡсаттар һәм бурыстар.**

Башҡорт теленә өйрәтеү буйынса 2-се класс уҡыусылары алдында түбәндәге бурыстар ҡуйыла:

1. Өйрәнелгән материалдарҙы телмәрҙә ҡулланыу.
2. Тәҡдим ителгән темалар буйынса балаларҙың һүҙлек составын арттырыу, телмәр күнекмәләрен камиллаштырыу.
3. Балаларҙың оптималь уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.
4. Ситуациялар, темалар буйынса һорауҙар биреү, шул һорауҙарға һүрәт, картина, текст нигеҙендә ижади яуап бирә белеү.
5. Темаға тап килгән шиғырҙар ятлау, йырҙар өйрәнеү һәм башҡарыу, экскурсияларҙа, уйындарҙа ҡатнашыу, концерттар әҙерләү һәм сығыш яһау. Һәр осраҡта ла телмәр төҙөү иғтибарға алына.
6. Әйтелеше ҡатмарлы булмаған һүҙҙәрҙе, ябай һөйләмдәрҙе тәүҙә күсереп, шунан яттан яҙыу.
7. Һәр тема буйынса эш барышында тыуған Республика менән танышыуҙы дауам итеү.
8. Башҡорт халҡына, тарихына, Башҡортостан тәбиғәтенә, сәнғәтенә, әҙәбиәтенә ихтирам тәрбиәләү.

II класта башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың интегратив маҡсатын уҡыусыла элементар коммуникатив компетенция формалаштырыу тәшкил итә.

Элементар коммуникатив компетенция – уҡыусының типик ситуацияларҙа телдән һәм яҙма рәүештә башҡорт теле саралары ярҙамында аралашыуға әҙерлеге һәм һәләте. Шулай итеп, II класта башҡорт телен уҡытыуҙың түбәндәге маҡсаттарын билдәләп була:

уҡыусыһының телмәр мөмкинлектәрен һәм ихтыяждарын иҫәпкә алып телдән (тыңлап аңлау һәм һөйләү) һәм яҙма (уҡыу һәм яҙыу) рәүештә аралашыу оҫталығын формалаштырыу;

уҡыусыларҙы башҡорт балалар фольклоры һәм нәфис әҙәбиәт үрнәктәре менән таныштырыу; башҡа милләт вәкилдәренә ҡарата ихтирам тәрбиәләү;

уҡыусыларының телмәр, интеллектуаль һәм танып белеү һәләтен һәм уҡыу оҫталығын үҫтереү; башҡорт телен артабан үҙләштереүгә мотивация булдырыу;

башҡорт теле саралары ярҙамында уҡыусыны тәрбиәләү һәм уның төрлө яҡлы үҫешенә булышлыҡ итеү.

«Башҡорт теле» предметының эшмәкәрлекле характеры донъяны бөтөн, эмоциональ һәм актив ҡабул итеүсе башланғыс класс уҡыусыһының тәбиғәтенә тап килә.

## Уҡыу предметы йөкмәткеһенең дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы (йүнәлеше)

Башланғыс мәктәптә башҡорт телен өйрәнгәндә уҡыусыларҙың дөйөм телмәр үҫеше стимуляциялана; коммуникатив мәҙәниәте үҫә; дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы формалаша һәм дәрестә аралашыу процесында, балалар фольклоры үрнәктәре һәм текстар менән танышҡанда әхләҡи тәрбиә нигеҙҙәре барлыҡҡа килә; сит мәҙәниәткә ҡарата толерантлыҡ формалаша.

## Уҡыу планында предметтың урыны

Уҡыу планында башланғыс мәктәптә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға 2 класта 35 сәғәт бүленгән (аҙнаһына 1 сәғәт)

**Һылтанма:** эш программаһы ММБ ултырышында ҡабул ителгән «Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт теле буйынса берҙәм талаптар»ҙы иҫәпкә алып төҙөлдө (Протокол № 1 , 29 август 2015 йыл.)

## Уҡыу предметын өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре.

Шәхси һөҙөмтәләр

Башҡорт телен 2 класта өйрәнеүҙең шәхси һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә: донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү; үҙендә илдең гражданины итеп тойоу; телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү; башҡорт теле саралары ярҙамында (балалар фольклоры, балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үрнәктәре) уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.

Метапредмет һөҙөмтәләр

уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү; элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү;
уҡыусының танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү; башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу;
уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.

Предмет һөҙөмтәләре

башҡорт теле нормалары (фонетик, лексик, грамматик) тураһында башланғыс белешмә; (курс йөкмәткеһе кимәлендә) өн, хәреф, һүҙ кеүек тел берәмектәрен табыу һәм сағыштырыу һәләте.

**А.** Коммуникатив сферала (башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә)

Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы:

һөйләү телмәрендә:
- аралашыуҙың типик ситуацияларында элементар этикет диалог алып барыу;
- элементар кимәлдә уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы;

тыңлап аңлауҙа:

-уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы ҙур булмаған текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы;

уҡыуҙа:
өйрәнелгән тел материалына таянып төҙөлгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;
өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу;

яҙма телмәрҙә:
яҙыу техникаһына эйә булыу;
үрнәк буйынса байрам менән ҡотлау һәм ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.

Тел компетенцияһы (тел сараларын үҙләштереү).

башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм айырыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;
төрлө һөйләм төрҙәрен интонация менән уҡыу;
башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән уҡыу һәм орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланыу;
башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән лексик берәмектәрҙе (һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, баһалау лексикаһы, телмәр клишелары) һәм грамматик күренештәрҙе таныу һәм телмәрҙә ҡулланыу.

Социомәҙәни компетенция.

географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының ҙур булмаған әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү;

**Б.** Танып белеү сфераһы:

айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, ябай һөйләмдәр кимәлендә башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү;
башланғыс мәктәп тематикаһы кимәлендә өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү;

ҡағиҙәләр, таблицаларҙы ҡуллана белеү;
үҙ-үҙеңде башланғыс класс уҡыусыһы кимәлендә баһалай белеү;
**В.** Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында:
башҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡабул итеү;
балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.
**Г.** Эстетик сферала:
башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү;
балалар әҙәбиәте үрнәктәре менән танышҡанда матурлыҡты танырға өйрәнеү.
**Д.** Хеҙмәт сфераһында:
- уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

## 3. **Телмәрҙең тематик йөкмәткеһе.**

Һөйләү һәм яҙма телмәрҙең йөкмәткеһе белем биреү һәм тәрбиәүи маҡсаттарға , башланғыс класс уҡыусыһының йәш үҙенсәлектәренә тап килә һәм түбәндәге темаларҙы үҙ эсенә ала:

Башҡорт теленең үҙенсәлекле хәрефтәрен һәм өндәрен өйрәнеү.

Танышыу. Һаулыҡ һорашыу.

Мин һәм минең ғаиләм. Минең яратҡан шөғөлөм. Көн тәртибе. Магазин: кейем-һалым, аяҡ кейеме, аҙыҡ-түлек алыу. Яратҡан ризығым. Ғаилә байрамдары: тыуған көн, Яңы йыл. Бүләктәр.

Минең дуҫтарым. Йорт хайуандары.
Минең мәктәбем. Класс бүлмәһе, уҡыу предметтары, уҡыу әсбаптары. Дәрестәр.
Тирә яҡтағы донъя. Минең йортом/ квартирам/ бүлмәм: бүлмәләр, йыһаздар. Тәбиғәт. Йорт хайуандары һәм ҡырағай хайуандар. Яратҡан миҙгелем. Һауа торошо.
Тыуған илем. Башҡортостандың баш ҡалаһы. Әҙәби персонаждар. Балалар фольклоры.

Коммуникатив оҫталыҡтар.

Һөйләү телмәре
Диалогик форма:
типик ситуацияларҙа диалог алып барыу;
һорау-яуап рәүешендәге диалог.
Монологик форма:
- телмәрҙең төп коммуникатив төрҙәрен (тасуирлау, хикәйәләү, ҡылыҡһырлау) ҡулланыу.
Тыңлап аңлау
- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен аңлауы;
өйрәнелгән тел материалына таянып эшләнгән аудиояҙмалағы ҙур булмаған текстарҙы аңлау.
Уҡыу
башҡорт теле материалына таянып эшләнгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;

өйрәнелгән материалды һәм бер нисә яңы һүҙҙе үҙ эсенә алған тексты эстән уҡыу һәм аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу (персонаждарҙың исемдәре, географик атамалар һ.б.).

Яҙыу

текстан һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу оҫталығы;

Тел саралары һәм уларҙы ҡулланыу күнекмәләре.

Графика, каллиграфия, орфография.

Башҡорт теленең алфавиты. Йы, йе, йө, йү, йә ҡушымсалары. Өн һәм хәрефтең тап килеүе. Уҡыу ҡағиҙәләре. Төп орфографик ҡағиҙәләр. Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

Телмәрҙең фонетик яғы.

Башҡорт теленең специфик өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм ишетеү. Төп орфоэпик нормалар. Башҡорт телендә баҫым. Һөйләмдең интонацион төрҙәре.

### 4. **Әҙерлек кимәленә талаптар**

Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы:

һөйләү телмәрендә:

- аралашыуҙың типик ситуацияларында элементар этикет диалог алып барыу;
- элементар кимәлдә уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы;

тыңлап аңлауҙа:

уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы ҙур булмаған текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы;

уҡыуҙа:

өйрәнелгән тел материалына таянып төҙөлгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;

өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу;

яҙма телмәрҙә:

яҙыу техникаһына эйә булыу;

үрнәк буйынса байрам менән ҡотлау һәм ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.

Тел компетенцияһы (тел сараларын үҙләштереү).

башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм айырыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;

төрлө һөйләм төрҙәрен интонация менән уҡыу;

Социомәҙәни компетенция.

географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының ҙур булмаған әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү;

Б. Танып белеү сфераһы:

айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, ябай һөйләмдәр кимәлендә башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү;

өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү;

ҡағиҙәләр ҡуллана белеү;

үҙ-үҙенде башланғыс класс уҡыусыһы кимәлендә баһалай белеү;

В. Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында:
башҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡабул итеү;
балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.
Г. Эстетик сферала:
башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү;
балалар әҙәбиәте үрнәктәре менән танышҡанда матурлыкты танырға өйрәнеү.
Д. Хеҙмәт сфераһында:
уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

Уҡыу йылы аҙағында 2 -класс уҡыусылары түбәндәге белем һәм күнекмәләргә эйә булырға тейеш:

1. Һөйләгәнде йәки уҡығанды аңлай алыу (аудирование):
- уҡытыусының, иптәшенең һөйләгәнен, уҡығанын аңлай алыу;
- иҫәнләшеү, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү, ғәфү үтенеү, үтенесте белдереү, рөхсәт һорау (телмәр этикеты);
- текстың йөкмәткеһе, ситуация буйынса һорау биреү.

2. Уҡыған текст буйынса, күҙәтеүҙәр нигеҙендә һөйләй белеү, ситуацияға ярашлы һөйләшеү (говорение):
- бәләкәй күләмле текстың йөкмәткеһен һөйләү,
- һүҙлек һүҙҙәрен белеү, уларҙы дөрөҫ ҡулланып һөйләү,
- диалог төҙөү, төркөмдәрҙә һөйләшеү,
- үҙең, ғаилә ағзалары, уларҙың исемдәрен белеү, һөнәр-шөғөлдәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте һ.б. тураһында һөйләү,
- ваҡиғаға, персонажға үҙ мөнәсәбәтеңде әйтеп биреү,
- башҡорт теленән руссаға һәм киреһенсә тәржемә итеү.

3. Уҡыу (чтение):
- тексты дөрөҫ, шыма, талғын уҡыу (орфоэпик нормалар нигеҙендә),
- поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу,
- уҡыған текстың йөкмәткеһен билдәләй алыу, персонаждарын әйтеү,
- текстан һорауҙарға яуаптар табыу, уҡып күрһәтеү.

4. Яҙыу (письмо):
- хәрефтәрҙе матур, дөрөҫ, тейешле кимәлдә тоташтырып яҙыу,
- ҙур булмаған тексты күсереп яҙыу,
- шундай уҡ текст буйынса йә картина нигеҙендә 2-3 һорауға яуап яҙыу,
- бирелгән ситуация буйынса 2-3 һөйләмдән торған текст яҙыу
- ныҡлы әҙерлектән һуң өйрәтеү характерындағы диктант, изложение, инша яҙыу (программала күрһәтелгән нормалар күләмендә).

## 5. Уҡыусыларҙың белемдәрен баһалау нормалары.

1. Балаларҙың уҡыу һәләтлектәрен баһалау.

Уҡыу техникаһын тикшереү.

Ижекләп уҡыу күнекмәләрен формалаштырыу. Уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе тотош уҡыу. Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе һәм ҡыҫҡа текстарҙы аңлы уҡыу. Дөрөҫ интонация һәм пауза менән уҡыу. Аңлы һәм тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.

Ҡысҡырып уҡыу.

Ижекләп уҡыуҙан уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе аңлы рәүештә тотош уҡыуға күсеү. Уҡыу тиҙлеген әҙмә-әҙлекле үҫтереү.

Эстән уҡыу.

Эстән уҡығанда әҫәрҙең мәғәнәһен аңлау. Уҡыуҙың төрөн билдәләү. Текстан кәрәкле информация таба белеү.

Балаларҙың уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:

| Класс | Һүҙ | Билдә | Эстән уҡыу |
|---|---|---|---|
| 2 | 30-40 | 100-120 | 35-40 |

2. Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары.

Яҙма эштәрҙең төрҙәре:

1) һүҙҙәрҙе, фразаларҙы һәм һөйләмдәрҙе күсереү;

2) диктант;

Һаналған яҙма эштәрҙең башланғыс кластарҙа үткәрелә торғандары элементар характерҙа, өйрәтеү маҡсатында һәм ныҡлы әҙерлектән һуң ғына яҙҙырыла. Әҙерлек эштәре төрлөсә булырға мөмкин: һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыр алдынан бер нисә тапҡыр телдән әйттереү, ниндәй хәрефтәр яҙылыуын анализлау, ҡағиҙәләрҙе ҡабатлау һ.б.

**Контроль характерҙағы яҙыу эштәренең һаны уҡыу йылы эсендә түбәндәгесә тәкдим ителә:**

| Эш төрҙәре | Класс |
|---|---|
| | 2 |
| Күсереп яҙыу | 2 |
| Һорауҙарға яуаптар яҙыу | - |
| Диктант | 1 |
| Изложение | - |
| Инша | - |
| Бөтәһе | 3 |

**Методтар:**

күҙәтеү;

яуап һайлау;
ҡыҫҡа яуап;
башҡарыу процесын баһалау;
башҡарыу процесын һәм һөҙөмтәһен баһалау;
портфолио.

**7. Әҙәбиәт**


1. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
2. Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағыҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.
3. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
4. Давлетшина М. С. Методика преподавания башкирского языка(1часть) - Уфа, 2010г.
5. Давлетшина М. С., Габитова З.М. Методика преподавания башкирского языка (2 часть) - Уфа,2011г.
6. Нафикова З.Г., Валеева В.В. Наглядно-дидактическое пособие по усвоению башкирского языка (на баш.яз.) Эдвис, 2008 г.
7. Рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу.Методик күрһәтмә.Ғәбитова З.М.,Баһаутдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н.,Йәғәфәров Р.Ғ. БМҮИ нәшриәте. Өфө, 2008.
8. Тулумбаев Х. А., Давлетшина М. С. Башкирский язык ( учебник для 1 класса русскоязычных школ) - Уфа, 2011
9. Тулумбаев Х. А., Давлетшина М. С. Башкирский язык ( учебник для 2 класса русскоязычных школ) - Уфа, 2012г.
10. Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым – Өфө: Китап, 2007.
11. Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Исәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
12. «Аҡбуҙат» журналы.
13. Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Исәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
14. Программа по башкирскому языку для русскоязычных учащихся I - XI классов школ с русским языком обучения. Составители программы: М.Г.Усманова, Х.А.Тулумбаев, М.С.Давлетшина, З.М.Габитова - Ижевск: "Книгоград", 2008.


**Һүҙлектәр**


1. Ураксин З. Г. Русско-башкирский словарь. Уфа, 2005.
2. Саяхова Л.Г., Усманова М.Г. Башкирско-русский словарь. Санкт- Петербург, 2005 г.


**9. Методик ҡулланмалар**


1. Аҙнабаева Ф.Г., Йылҡыбаева Г.Р., Нарынбаева А.З. һ.б. Гөлбостан: Балалар баҡсаһында телмәр үҫтереү өсөн методик ҡулланма. – Өфө: Китап, 2008.
2. Азнабаева Ф.Г.. Фаизова М.И.. Русский язык в национальном дошкольном образовательном учреждении. – Уфа:Китап,2010.
3. Аслаев Т.Х., Атнағолова С.В. Башланғыс мәктәптә телмәр мәҙәниәтен үҫтереү дәрестәре.- Өфө:Китап,2009.
4. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Дәүләтшина М.С. // Өфө, Китап, 2010.

5. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге . // И.М.Ғарипов. Өфө, Китап, 1994
6. Башҡорт телен уҡытыуҙа актив формалар һәм алымдар. Толомбаев Х.А., Асанбаева Р.Р., Өфө, БМҮИ, 2006
7. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән традицион булмаған дәрестәр. // Баһауетдинова М.И, Йәғәфәрова Ғ.Н., Өфө, Информреклама, 2003.
8. Башкирский язык для начинающих. Ф.Г. Хисамитдинова, З.Я. Шарипова, В.И. Хажин. Уфа, Баш. книжное изд-во, 1991.
9. Беҙ башҡортса уҡыйбыҙ.(1-2) .// Толомбаев Х.А. Дәүләтшина М.С. Өфө, Китап, 2002.
10. Габитова З.М. методические рекомендации и организация работы по обучению башкирскому языку в русской школе.- Уфа: Китап, 2006.
11. Ғәбитова З.М., Баһауетдинова М.И. Рус телле мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытыу. Методик күрһәтмә. – Өфө: Китап, 2008
12. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. Башҡорт телен дәүләт теле итеп өйрәнеүселәр өсөн.- Өфө: Китап, 2009.
13. Изучаем башкирский язык. Интенсивный курс обучения. .// Усманова М.Г. Өфө, Китап, 2011.
14. Йәш уҡытыусыға ярҙамға // Абуталипова Р.Ә. Өфө, Китап, 2003.
15. Нафиҡова З.Ғ., Аҙнабаева Ф.Г. Тылсымлы өндәр. Методик ҡулланма . - Өфө:Китап, 2010
16. Рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеүсе башланғыс кластар өсөн эш программалары.// Ғәбитова З.М., АбдуллинаМ.Ф.. Өфө, Китап, 2011.
17. Рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеүсе башланғыс кластар өсөн эш программалары.// Ғәбитова З.М., АбдуллинаМ.Ф.. Өфө, Китап, 2011.
18. Уҡытыусының тел буйыса уҡыу- уҡытыу методик комплекты (комплексы):
19. Урыҫ мәктәптәренең 1 классы өсөн “Башҡорт теле”дәреслегенә методик күрһәтмәләр.// Толомбаев Х.А. Өфө, Китап, 2001.
20. Урыҫ мәктәптәренең башланғыс синыфтарында башҡорт телен уҡытыу үҙенсәлектәре / Шарапов И.Ә. Өфө, Китап, 1997.
21. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр // Ғәбитова З.М., Толомбаев Х.А. Өфө, Китап, 2006.
    1. Баҫма пособиялар: таблицалар, портреттар.
    2. Ишетеп- күреү (экранно – звуковые) пособиялар: видеофильмдар, аудиояҙмалар.
    3. ИКТ: компьютер, телевизор.
    4. Уҡыу- практик ҡоролмалар: магнитлы класс таҡтаһы.

**9.Перечень образовательных Интернет- ресурсов**

2. Сайт, посвященный изучению башкирского языка - **http://tel.bashqort.com/home**
3. Электронный журнал учителей башкирского языка и литературы - **http://ostaz.ru/**
4. Башкирский языковой портал - **http://bashkort-tele.narod.ru/**
5. Башкирский форум - **http://www.bashforum.net/** **http://bashkort-tele.livejournal.com/**
6. **www.morb.ru** Официальный сайт Министерства образования Республики Башкортостан
7. **www.edu.ru** Федеральный портал "Российское образование"
8. **www.минобрнауки.рф**.минобрнауки.рф Министерство образования и науки РФ
   **http://www.pravitelstvorb.ru/** Официальный сайт Правительства Республики Башкортостан
9. **www.apkpro.ru** Академия повышения квалификации и профессиональной переподготовки работников образования
10. **www.ege.edu.ru** официальный информационный портал ЕГЭ

11. **www.zankov.ru** Образовательная система Л.В.Занкова
12. **kpolyakov.narod.ru** Методические материалы и программное обеспечениедля школьников и учителей
13. **window.edu.ru** информационная система "Единое окно доступа к образовательным ресурсам"
14. **school-collection.edu.ru** единая коллекция цифровых образовательных ресурсов
15. **fcior.edu.ru** федеральный центр информационно-образовательных ресурсов

## Календарь – тематик планлаштырыу

| № | Лексик тема | Грамматик тема | Сәғәт һаны | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлегенә характеристика | Үткәреү ваҡыты 2 класс | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | планлаш. | фактик |
| **I сирек 9 сәғәт** | | | | | | |
| 1 | Башҡортостан минең тыуған Республикам | Ә өнө һәм хәрефе [h], [ҙ] өндәре | 1 | Дәреслек менән танышыу. Уҡытыусының һөйләгәнен тыңлау. "Һаумыһығыҙ", "Һау булығыҙ" һүҙҙәренең мәғәнәһен аңлау, әйтеү. Ә өнөн дөрөҫ әйтеү, хәрефен яҙыу. | | |
| 2 | Танышыу | Ө өнө һәм хәрефе. Һинең исемең нисек? [и], [а] өндәре | 1 | Ө өнөн дөрөҫ әйтеү, хәрефен яҙыу. Яңы һүҙҙәр менән танышыу. | | |
| 3 | Беҙ- уҡыусылар | Ү өнө һәм хәрефе. Был кем? Был нимә? һорауҙары [ң], [ә] өндәре | 1 | Был кем? Был нимә? һорауҙарын белеү. Дәрестең уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү. | | |
| 4 | Беҙҙең ғаилә | Ғ өнө һәм хәрефе. Кем менән? Кемдең? [о] өнө | 1 | Ғ өнөн дөрөҫ әйтеү, хәрефен яҙыу. Кем менән? Кемдең? һорау-ң мәғәнә үҙенсәлектәрен аңлау. Һорауҙарға яуап биреү. | | |
| 5 | Әсәйемә ярҙам итәм | Ҙ өнө һәм хәрефе. Эйәлек заты ялғауҙары | 1 | Ғаилә ағзалары менән танышыу. Ҙ өнөн дөрөҫ әйтеү, хәрефен яҙыу. Яңы һүҙҙәр менән танышыу. | | |
| 6 | Ҡустымды(һеңлемде)ҡарайым | Ҡ өнө һәм хәрефе. [ө], [й]өндәре | 1 | Ҡ өнөн дөрөҫ әйтеү, хәрефен яҙыу. Яңы һүҙҙәр үҙләштереү, иҫтә | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | ҡалдырыу.<br>Шиғырҙар уҡыу. | | |
| 7 | Беҙҙең мәктәп | һ өнө һәм хәрефе.<br>Кем? Кемдәр?<br>һорауҙары | 1 | Дәрестең уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү.<br>Һ өнөн дөрөҫ әйтеү, хәрефен яҙыу.<br>Яңы һүҙҙәр үҙләштереү.<br>Һүрәттәр менән эш.<br>Диалог төҙөү.<br>Һорауҙарға яуап биреү.<br>Аудиояҙманан шиғырҙар тыңлау. | | |
| 8 | Беҙ мәктәпкә барабыҙ | ң өнө һәм хәрефе<br>[у]өнө | 1 | ң өнөн дөрөҫ әйтеү, хәрефен яҙыу. Тасуири уҡыу.<br>Яңы һүҙҙәр үҙләштереү.<br>Шиғыр ятлау. | | |
| 9 | Уҡыу әсбаптары | ҫ өнө һәм хәрефе.<br>Нимә? Ҡайҙа?<br>һорауҙары<br>[ү] өнө | 1 | ҫ өнөн дөрөҫ әйтеү, хәрефен яҙыу. Уҡыу әсбаптарын дөрөҫ атау.<br>Һүҙ, ижек моделдәрен һыҙыу.<br>Картина буйынса һөйләргә, һорау бирергә, һорауҙарға яуап бирергә өйрәнеү. | | |
| 10 | Класта кем дежур? | Ҡайҙа? һорауы<br>[ы]өнө | 1 | Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен дөрөҫ әйтеү. Яңы һүҙҙәр үҙләштереү.<br>Диалог төҙөү. Ҡайҙа? һорауына яуап биреү.<br>А.Йәғәфәрованың "Уңғандар" шиғырын уҡыу.<br>Гәзит-журнал материалдарын ҡарау. | | |
| 11 | Беҙҙең дәрестәр | Кемдәр? Ни эшләй? | 1 | Дәрестең уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү. | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | һорауҙары<br>[э], [е] өндәре | | Яңы һүҙҙәр үҙләштереү. Яҙыу өлгөләре дәфтәрендә хәрефтәр яҙыу.Һөйләм төҙөү. Картина буйынса һөйләргә. Һорауҙарға яуап бирергә өйрәнеү | | |
| 12 | Беҙҙең класс | Уу өнө һәм хәрефе<br>[з], [ҙ] өндәре | 1 | Яңы һүҙҙәр үҙләштереү. Уу өнөн дөрөҫ әйтеү, хәрефен яҙыу. Һүҙҙәрҙә ҫ өнөн табыу. "Беҙҙең класс" темаһы буйынса һүҙҙәрҙе үҙләштереү.Һөйләмдәр төҙөү.Һүҙҙәрҙә нәҙек һәм ҡалын ялғауҙар менән танышыу. | | |
| 13 | Төҫтәр | Ниндәй? Ни төҫлө? һорауҙары<br>[һ] өнө | 1 | Төҫ атамалары менән танышыу. Шул һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөргә өйрәнеү. Эш дәфтәрендә бирелгән һүрәттәрҙе төрлө төҫкә буяу. Уҡытыусы уҡыған һөйләмде аңлау. Диалог төҙөү. | | |
| 14 | Һанай беләһеңме? | Нисә һорауы?<br>[г,] [ғ] өндәре | 1 | Башҡортса һанай белеү. Эш дәфтәрендә һанлы һүрәттәрҙе буяу. Нисә һорауы менән танышыу. Кластағы предметтарҙы һанау. Бәләкәй күләмле текстарҙы тәржемә итеү. | | |
| 15 | Уйынсыҡтар доньяһында | Кем нимә ярата? һорауы<br>[к], [ҡ] өндәре | 1 | Уйындар, уйынсыҡ атамалары менән танышыу.Һөйләмдәр төҙөргә өйрәнеү. | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Яраҡкан уйынсыҡтар тураһында һөйләү.<br>Һорауҙарға яуап биреү.<br>Йомаҡтар уҡыу. | | |
| 16 | Уйынсыҡтар магазинында | Кемгә нимә кәрәк? Кемдеке? [с], [ç] өндәре | 1 | Уйындар, уйынсыҡ атамалары менән танышыу.Һөйләмдәр төҙөргә өйрәнеү.<br>Яраҡкан уйынсыҡтар тураһында һөйләү.<br>Һорауҙарға яуап биреү.<br>Йомаҡтар уҡыу | | |
| 17 | Кем нимә эшләй? | Башҡорт теленең үҙенсәлекле хәрефтәре [ң] өндәре | 1 | Башҡорт теленең үҙенсәлекле хәрефтәрен иҫкә төшөрөү.<br>Һүҙҙәр уйлап әйтеү.<br>Һөйләмдәр төҙөү. | | |
| **18** | **Котроль күсереп яҙыу** | | **1** | | | |
| **III сирек 10 сәғәт** | | | | | | |
| 19 | Хаталар өҫтөндә эш. Тән өлөштәре | Нәҙек һуҙынҡы өндәр | 1 | Кешенең тән өлөштәре атамаларын өйрәнеү.<br>Яңы һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырыу.<br>Шиғыр ятлау.<br>Картиналағы предметтарҙы күрһәтеү.<br>Мәҡәлдәр әйтеү. | | |
| 20 | Һабын-беҙҙең дуҫыбыҙ | Зат ялғауҙары | 1 | Яңы һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырыу.<br>Һаулыҡты һаҡлау төшөнсәләрен төшөнөү.<br>Зат ялғауҙарын практик ҡулланыу.<br>Дәреслектән шиғырҙар уҡыу. | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 | Өҫ кейемдәре | Ҡалын һуҙынҡы өндәр | 1 | Кейем-һалым исемдәрен иҫтә ҡалдырыу. Һүрәтен төшөрөү һәм яҙыу. Яҙыу дәфтәрендә яңы һүҙҙәр яҙыу. Йомаҡтар сисеү | | |
| 22 | Аяҡ кейемдәре | Ижек, [йо], [йө] өндәре | 1 | Тема буйынса мәғлүмәтте ҡабул итеү. Өҫ кейемдәренең атамаларын дәфтәргә яттан яҙыу. Магнитофондан кейемдәрҙе таҙа тотоу тураһында диалог тыңлау. Мәҡәлдәр әйтеү, ижектәргә бүлеү. | | |
| 23 | Йорт хайуандары һәм ҡоштары | А өнө һәм хәрефе, ике телдә дөрөҫ әйтелеше | 1 | Дәрестең уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү. Яңы һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырыу. Йорт хайуандарын ҡырағай хайуандарҙан айыра белеү. Һөйләмдәр төҙөү. | | |
| 24 | Ҡырағай хайуандар | О өнө һәм хәрефе, ике телдә дөрөҫ әйтелеше | 1 | Дәрестең уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү. Яңы һүҙҙәр үҙләштереү. О өнөн һәм хәрефен, ике телдә дөрөҫ әйтеү. | | |
| 25 | Аҙыҡ-түлек | Башҡорт телендә килеш ялғауҙары | 1 | Аҙыҡ-түлек атамаларын дөрөҫ әйтеү. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү. Һөйләгәнде тыңлау һәм кәрәкле һүҙҙәрҙе айыра белеү. Һүҙлек запасын байытыу. | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 | Аҙыҡ-түлек магазинында | Һөйләмдә һүҙҙәрҙең урыны. Ҡайҙан? һорауы | 1 | Тема буйынса яңы һүҙҙәр үҙләштереү. Һөйләмдә һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланыу. Шиғыр тыңлау, йөкмәткеһен аңлау. Һүҙлек запасын арттырыу.Рус телендәге һүҙҙәр тәртибен башҡорт телендәге менән сағыштырыу. | | |
| **27** | **Контроль күсереп яҙыу "Ярҙамсы"** | | **1** | | | |
| 28 | Хаталар өҫтөндә эш. Һөнәрҙәр бик күп | Нәҙек һәм ҡалын ялғауҙар | 1 | Артикуляцион күнегеүҙәрҙе ятлау. Яңы һүҙҙәр үҙләштереү. Уҡыу күнекмәләрен үҫтереү. Нәҙек һәм ҡалын ялғауҙар менән танышыу. Һөнәрҙәр менән танышыу. | | |
| **I V сирек 8 сәғәт** | | | | | | |
| 29 | Уҡыу-беҙҙең эшебеҙ | Һөйләмдә тиң киҫәктәр | 1 | Тема буйынса яңы һүҙҙәр үҙләштереү. Һөйләмдә һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланыу. Сюжетлы картина буйынса һорауҙарға яуап биреү.Шиғырҙар ятлау. Текстар уҡыу.Йомаҡтар сисеү. | | |
| 30 | Емеш-еләк,йәшелсә | Башҡорт телендә күплек ялғауҙары | 1 | Емеш-еләк, йәшелсә атамаларын иҫтә ҡалдырыу. Шиғырҙарҙы дөрөҫ уҡыу. Аудиокассетанан шиғырҙар тыңлау. | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 31 | Таҙалыҡ | Башҡорт телендә юҡлыҡ ялғауҙары | 1 | Яңы һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырыу. Һүрәт буйынса бәйләнешле телмәр төҙөргә өйрәнеү.Тирә-яҡтағы предметтарҙың исемен атау.Диалог төҙөү. | | |
| 32 | Уҡыусының көн тәртибе | Башҡорт теленең үҙенсәлекле хәрефтәре | 1 | Уҡыусының көн тәртибе менән танышыу.Бөхтәлек, йыйнаҡлыҡ тураһында мәғлүмәт алыу.Башҡорт теленән руссаға һәм киреһенсә тәржемә итеү | | |
| **33** | **"Уҡыусының көн тәртибе" темаһы буйынса контроль диктант** | | **1** | | | |
| 34 | Хаталар өҫтөндә эш. Кластан тыш уҡыу. | | **1** | Башҡорт телендә гәзит журналдарҙы уҡыу тәржемә итеү | | |
| 35 | Йомғаҡлау | | **1** | | | |
| 36 | Экскурсия | | **1** | яҙ миҙгеле, яҙ күренештәре тураһында уҡылған текстар буйынса үҙеңдең уй-фекереңде әйтә белеү | | |